# *“Тәңре яҙа әҙәм яҙмыштарын...”*

## *Ҡайтам Уралымды һағынып*

Мин Уралдың урман далаһында
Аунап үҫкән башҡорт балаһы.
Сикһеҙ диңгеҙ, ҡомло сүллектәрҙә
Аҙашҡандай баҙап ҡаламын.

Сит ерҙәрҙең еле иркәләмәй,
Ҡояшы ла өтә, наҙламай.
Айы ла ят, йондоҙҙары иһә
Уралдағы кеүек баҙламай.

Сит ерҙәрҙә сикһеҙ даръялар күп,
Тик юҡ унда ғорур Ағиҙел.
Талғын аҡҡан тыныс Әйем дә юҡ,
Юҡ һайығып ҡалған Ләмәҙем.

Сит илдәрҙә сикһеҙ һағындыра
Сал урманлы сая Уралым.
Ҡайтҡанымда әсәм төҫлө көтә,
Күкһел томандарға уралып.

Эҫе ҡояш,
Зәңгәр диңгеҙ эҙләп,
Сит илдәргә сәфәр тотабыҙ.
Ә сәфәрҙән
Һалҡын ҡышы,
Алтын көҙө,
Наҙлы яҙы,
Йәмле йәйе булған
Урал ерен һағынып ҡайтабыҙ.

## *Тыуған йорт тупһаһы*

Бына тағы ҡайтып ауылыма
Ҡаҡтым бала саҡтың ишеген.
Тик асманы бер кем.
Бикле ишек,
Бикле күңелеләй күршенең.

Мин соланда торам.
Ә бала саҡ эстә,
Мине индерергә теләмәй.
Ғәйептәрем күпме,
Гонаһтарым ҙурмы?
Ниндәй генә хистәр биләмәй...

Етем ҡалған өйҙә саф бала саҡ
Үҙе генә ғүмер кисерә.
Ә мин унан илһам көтөп ҡайтам,
Шишмә һыуын ҡайтам эсергә.

Тыуған йорттоң тупһаларын ҡосоп,
Илаһам да миңә йыуаныс.
Бала сағым ҡабул итмәһә лә,
Тыуған йортоң булыу ҡыуаныс.

Бер илайһы, бер йырлайһы килә,
Тыуған йорттоң ҡосоп тупһаһын.
Хоҙай айырмаһын ошо мәлдән,
Тыуған тупраҡ ҡапыл йотмаһын...

## *Терелəргə терəк табыла...*

Эй, Хоҙайым, ниндəй гонаһ өсөн
Əрəм иттең əҙəм балаһын?!
Белмəнеңме, күрмəнеңме икəн
Күпме эше тороп ҡалаһын?

Ҡайындары ҡалған ҡайғыларға,
Онотҡандай япраҡ яраһын.
Тəңре яҙа əҙəм яҙмыштарын, —
Белмəй ҡайҙа, күпме бараһын.

Уңға китһə, уҙырмын, тип көтə,
Ҡаушап ҡала ҡайсаҡ түҙəлмəй.
Тартып ҡарай һулға,
Тормош арбаһының
Юлы уңыр, тиеп күҙаллай.

Һин тигəнсə генə килеп сыҡмай, —
Бирəү бар ҙа бөгөн, бирəү юҡ.
Терелəргə терəк табылыр ҙа,
Йығылғанға ғына терəү юҡ.

## *Һуңғы яҙым ғына һуңлаһын...*

Яҙмышыма яҙҙар яҙылмаған,
Һағышлы көҙ — минең юлдашым.
Шуға көтəм көҙҙө,
Тик ашыҡмай үҙе,
Ҡалды микəн əллə аҙашып?

Ғүмеркəйҙəр миҙгелдəрҙəн хасил.
Ə мин иһə —
Ошо тəбиғəттең балаһы.
Яҙҙарымды ялғап йəйҙəремə,
Көҙҙəремə табан бараһы.

Һағыштарым һары япраҡ булып,
Түшəлгəндəр ергə келəмдəй.
Ап-аҡ ҡарҙар күңел офоғома
Аҡ шатлыҡтар алып килгəндəй.

Яҙмышыма нисə яҙ яҙылған,
Нисə көҙ яҙылған — Хоҙайҙан.
Миҙгелдəрҙе һанап моңаймаҫмын,
Ғүмер шул ҡəҙəрле оҙайһа.

Килер əле йəйҙəр, һуңлаһа ла,
Белəм аҡ ҡыштары булаһын.
Һуңғы көҙөм генə ашыҡмаһын,
Һуңғы яҙым ғына һуңлаһын.

## *Үкенмəҫмен инде, тиһəм дə...*

Үкенмəҫмен инде, тиһəм дə мин,
Үкенерлек мəлдəр бар икəн.
Керпегемə ҡунып иркəлəгəн
Яңы яуған ап-аҡ ҡар икəн.

Үкендерə үкһеп илағандар,
Артыҡ ҡыуанғандар шатлыҡтан.
Һəр нəмəнең үҙ самаһы икəн, —
Ишараһы микəн ҡартлыҡҡа.

Үкендерə атай-əсəйҙəрҙең
Ҡайсаҡ киткəнемə күңелен.

Тулы ине барса булмыштары
Беҙгə һөйөү менəн түгелеп.

Үкендерə — тыуған ергенəмдең
Ҡəҙерҙəрен һуңлап аңланым.
Миңə тигəн тоғро мөхəббəтен
Һөйөп туйып бөтə алманым.

Əсəй наҙы булып иркəлəгəн
Тыуған яҡтан иҫкəн ел икəн,
Үкенмəҫмен инде, тиһəм дə мин,
Үкенерлек мəлдəр бар икəн.

## *Торам яңғыҙ ҡайын ҡосаҡлап...*

Тағы ҡайттым әле тыуған ергә,
Тағы мендем әле тауҙарға.
Тау башында ҡалған йүләр саҡтың,
Мөхәббәтле гүзәл йәшлегемдең
Ауаздарын ҡабат тыңларға.

Ҡыскә ауышҡан ғүмерҙәр
Ниңәлер тарта шунда.
Бала саҡ менән йәшлегем
Ҡөтәлер төҫлө унда.

Дарманымдың һуңғы сәмен егеп,
Үрләһәм дә үркәс тауҙарға,
Бер кемде лә таба алманым,
Хистәремде бүлә алманым,
Яҙған яңғыҙыма ҡалырға.

Ҡайындар ҙа ҡартайғандай төҫлө,
Һүнеп ҡалған төнгө усаҡтар.
Һағыштарҙан албырғап та ҡалып,
Торам яңғыҙ ҡайын ҡосаҡлап.

## *Яңғыҙ япраҡ*

Яңғыҙ япраҡ ҡарҙа өйөрөлә,
Ҡайҙа бәрелһә лә, яралы.
Йәл япраҡҡай.
Әле көҙ генә бит,
Алда һалҡын ҡыштар,
Ыжғыр бурандар ҙа бар әле.

Икәү булһа, бәлки, өшөмәҫ тә ине,
Йәл япраҡтың яңғыҙ ҡалғаны.
Аҙашып та килеп таба төҫлө
Яҙмыштарҙың беҙгә яҙғаны.

Бөгөн мин дә ошо япраҡ төҫлө
Өҙөлөп төшкән һымаҡ ағастан.
Яңғыҙҙарҙың хәлен аңлайһың, тик
Яңғыҙлыҡта үҙең ҡалғас та.

Яңғыҙ япраҡ төҫлө бер аҙашам,
Берсә ел-ямғырҙа күшегәм.
Күңел усағымдың уты һүнгән —
Яңғыҙ ҡалмағыҙсы, кешеләр.

## *Тура һүҙле булыу еңел түгел*

Тура һүҙле булыу еңел түгел,
Тағы ҡырҙым кеше күңелен.
Хаҡлы икәнемде белһәм дә һуң
Үҙем бер иланым түгелеп.

Тура әйткән туғанына хатта
Ярамаған, тиҙәр, халыҡта.
Йомшаҡ түшәп, йығытаһым килмәй,
Тормош асылы бит хаҡлыҡта.

Ялған асыҡланыр ярты юлда,
Хаҡлыҡ иһә илтер үрҙәргә.
Гонаһым күп, тиеп ҡалтырамай,
Ингән саҡта хатта гүрҙәргә.

Тура юлдан тура баҫып ҡына,
Үтһен кеше ғүмер һуҡмағын.
Фани донъяларҙа үкенмәһен,
Ожмахтарҙа тыныс йоҡлаһын!